# БЕҘҘЕҢ ӨЙҘӘҢ ЯҢЫЛЫКТАРЫ

Баймаҡ районы

№ 7
октябрь,
2019 йыл

Мәғлүмәт бите — Ишмырҙа ауылы


# Онотолмай золом һалған яралар...





**Ишмырҙа ауылында золом ҡорбандары иҫтәлегенә стела асыу тантанаһы үтте. Изге ниәт менән уҙғарылған митингыла йола буйынса, әрүәхтәр рухына аят бағышланды. Ауыл хакимиәте башлығы Ҡашҡаров З.М. стеланы эшләгән ир-егеттәргә Рәхмәт ҡағыҙҙары тапшырҙы. Укыусылар Р.Ғариповтың ""Табыныу" поэмаһынан өҙөк һөйләнеләр. Золом корбандарының туғандары уларҙың бик аяныслы, тетрәндергес яҙмыштары тураһында һөйләгәндәре берәүҙе лә битараф калдырмағандыр. Әлбиттә, тарихта башҡаса ундай фажиғәле осорҙарҙың кабатланмауын теләнеләр. Митингыла катнашыусылар сәскәләр һалып якты уйҙар менән күңел тынıслығы алып таралыштылар.**

## Мостай Кәрим

2-се бит

**19 октябрь Ишмырҙа ауылы төп дөйөм белем биреү мәктәбендә Башҡортостандың 100 йыллығына, башҡорт халыҡ шағиры Мостай Кәримдең тыуыуына 100 йыл тулыуға арналған этношәмбе үтте. Көн башында укыусылар үҙ кластарында Мостай Кәрим ижадынан диктант яҙҙылар. Укыусылар туған телен якшы беләләр, мәктәп буйынса 100 % - өлгәш, 63,6 – сифат булды. (Семен ауылы башланғыс мәктәбе лә ситтә калманы, диктант яҙыуҙа 6 укыусы катнашты һәм 100 % - өлгәш, 66,6 – сифат) Икенсе өлөш укыусылар ырыуҙарға бүленеп, Мостай Кәримдең шиғырҙарын яттан һөйләне. Бәйгелә Кейекҡужин Илназ, Нургалина Илсиә, Игебаев Морат, Ниғмәтова Айгүзәл, Әфләтунова Нурзилә, Ишмырҙин Азамат оҫта һөйләнеләр. Иң күп мәрәй йыйыусы " Бөрйән " ырыуы. Афариндар!**

## Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 2020 йылды республикала «Зауыҡлы биләмәләр йылы: газондар, тротуарҙар, яҡтылыҡ, ҡоймалар» тип иғлан итеү тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы.

Белем усағыбыҙҙа тәүге тапҡыр "зәңгәр яғыулыҡ" тоҡанды.

Уҡыусылар ҡоролтайы ағзаларына берҙәм футболкалар тапшырылды

Йәштәр араһында "Аҡйондоҙ һәм Аҡйегет" бәйгеһендә Нурзилә Әфләтүнова һәм Айгиз Ишмырҙин беренсе урынға лайыҡ булды.

Башҡортостанда аналог телесигнал биреү 14 октябрҙә туҡтатылды.

Мәҙәниәт йортонда район буйынса "Ауылым йырҙары" исемле конкурс булып үтте.

ГТО нормаларын яҡшы тапшырыусыларға алтын миҙалдар тапшырылды

**Башҡа яңылыҡтарҙы мәктәптең** https://ishmurzino.02edu.ru/school/ **сайтында ҡарай алаһығыҙ.**

**Шунда уҡ** → Ишмырҙа ТВ

# Этношәмбе һәм этнодиктант





Артабан балалар “Татыулыҡ һәм тыныслыҡ һиңә, илем” исемле һүрәттәр конкурсында ҡатнашты.Үҙәкина Гөлназ, Монасипова Лилиә,Үҙәкина Әдилә, Ишмырҙин Ирмәктең һүрәттәре бик матур төшерөлгән. ”Тамъян” ырыуын күп мәрәй йыйып, был бәйгелә алдынғылыкты бирмәне. Тыуған ил, тыуған ер хаҡындағы мәкәлдәр әйтеү буйынса “Үҫәргән” ырыуына етеүсе булманы, афарин!“Сәскә ат, тыуған Башҡортостаным! ” темаһына блалар бик күп итеп ребустар эшләгәндәр. Ребус сисеү барыһына ла оҡшаны. Был бәйгелә “Бөрйән” ырыуы еңеүсе булды.Өлкәнерәк балалар “Башҡортостан – ул беҙҙең ғорурлығыбыҙ!” тигән викторинала ҡатнашты. “Үҫәргән” ырыуы иң күп балл йыйҙы.Бәйгенең һәр төрөн ғәҙел жюри (Иҙел Мөхтәр улы, Рәмил Йәноҙаҡ улы) баһалап барҙыI урын -“Бөрйән” - 112баллII урын -“Үҫәргән” - 102баллIII урын -“Тамъян” - 71балл Этношәмбе бик файҙалы һәм фәһемле үтте.

**Хәбәрсе Әфләтунова Нурзилә**

## Зәңгәр яғыулыҡ тоҡанды

Башҡортостан Республикаһынын 100 йыллыҡ юбилейын билдәләгән көндәрҙең береһендә белем усағыбыҙҙа иҫтәлекле ҙур бер ваҡиға тарих биттәренә теркәлде. Был көндө уҡыусыларҙың күптән көткән хыялы тормошҡа ашты: мәктәптә тәүге тапҡыр “зәңгәр яғыулыҡ” тоҡанды.

Әйтергә кәрәк, районда газ селтәре төҙөлөшөнә ҙур иғтибар бирелә. Бөгөнгә тәбиғи газ селтәренә урындағы мәктәп тә тоташты. Бындай ҙур шатлыҡты түҙемһеҙлек менән көтөп алдыҡ, - тип белдерҙе ҡаҙанлыҡ операторы Сапаров Дамир ағай.



# Ололар көнө

1 октябрь көнө Ишмырҙа мәҙәниәт йортонда халыҡ-ара ололар көнөнә арналған байрам сараһы үтте.“Ағинәйҙәр” ҡоро, “Ҡатын-ҡыҙҙар”, ветерандар советы етәкселәре, мәктәп директоры ысын күңелдән ҡотланылар. Сара уҡыусыларҙың, ҡатын-ҡыҙҙарҙың моңло йырҙары, шаян бейеүҙәре менән үрелеп барҙы. Артабан мәктәп ашханаһында ауылдашыбыҙ Муллабаев Илгиздең ҡорбан ашын ауыҙ иттеләр, тәмләп сәй эстеләр.










## “Машина йөрөтөүсегә хат” акцияһы старт алды.

23 сентябрҙән 28 сентябргә тиклем беҙҙең белем усағыбыҙҙа хәүефһеҙлек аҙнаһы тип иғлан ителде. Балаларҙың юл хәрәкәте ҡағиҙәһен тейешенсә үтәү, ғүмерҙәрен юл фажиғәһенән аралау маҡсатында Ишмырҙа ауылы мәктәбе уҡыусылар ҡоролтайы ағзалары Баймаҡ ҡалаһы һәм районы ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре менән берлектә «МАШИНА ЙӨРӨТӨҮСЕГӘ ХАТ” исеме аҫтында акция үткәрҙе. Республикала балаларҙың юл-транспорт хәл-ваҡиғаларына тарыуы киҫкен мәсьәләләрҙең береһе булып ҡала. Балалар баҡсалары, мәктәптәр, йәмәғәтселек транспорты туҡталыштары янынан транспортта үткәндә, машина йөрөтөүселәргә, айырыуса иғтибарлы булырға саҡырҙылар. Беҙ Ишмырҙа ауылы уҡыусылар ҡоролтайы ағзалары Баймаҡ районы ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәренә оло рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ, эштәрендә уңыштар, ғаилә именлеге, һаулыҡ теләп ҡалабыҙ.

*Хәбәрсе Килсенбаева Гөлзифа*

# Шатлыҡлы хәбәр!..

Тағы ла бер шатлыҡлы хәбәр менән таныштырып үткебеҙ килә. Уҡыусылар ҡоролтайы ағзаларына Баймаҡ районы йәштәр ҡоролтайы етәксеhе Вадим Зөфәр улы тарафынан футболкалар ебәрелде. Ишмырҙа ауылы мәктәп директоры Иҙел Мөхтәр улы тантаналы рәүештә тематик линейкала ҡоролтай ағзаларына футболкаларҙы тапшырып үтте.










## “Таҙа Көҙән” акцияһы

Уҡыусылар ҡоролтай ойошмаһы Гөлгинә Мирғәле ҡыҙы етәкселегендә 18 октябрь көнө тыуған еребеҙҙе ҡурсалау, һаҡлап ҡалыу маҡсатында Таҙа көҙән акцияһына ярашлы С.Игишев урамында йәшәүселәргә иҫкәрмәләр таратты. Йылғабыҙ таҙа, ҡыйҙан таҙартылған булһа бик яҡшы булыр ине. Беҙ тәбиғәт хужалары! Тәбиғәтте һаҡлау тыуған төйәгенде һаҡлау ул.

**Гәзит айына бер тапкыр сығарыла.**

**Гәзит өсөн “Йәш хәбәрселәр” түңәрәге ағзалары яуаплы.**

**Мөхәррир – Шәйәхмәтова Ынйыгөл, 9 класс уҡыусыһы.**